**Алтын тамсы**

Әкиәттең башы бар, аҙағы бар, әммә ул ҡасан тыуған, ҡасан үләсәк, унығын бер кем белмәй. Был әкиәт тә – бик боронғо. Уны олатайымдың атаһы Аҡъюл олатайға, ул оләсәйенә һөйләгән. Ә миңә атайымдың әсәһе Һылыуҡай оләсәй һөйләне.

Борон-борон, Уралда әле кеше аяҡ баҫмаған урмандар булған саҡта, Янһары бер булған тигән кеше, ти. Ул мал аҫырап, ете ерҙә йәйләп, биш ерҙә ҡышлап йөрөгән. Бик булған тырыш Янһары – тимәгән көн, төн тимәгән – эшләгән дә эшләгән. Шуға күрә ул бер нәмәгә интекмәй, етеш иткән көн, ҡайғы белмәгән.

Ниндәй ҡаты имән дә ҡорой, кеше лә үлә бит. Берҙән-бер көн дә Янһары үлгән киткән. Ялбыр исемле маҡтансыҡ бер малайы тороп ҡалған. Күп ашаған, күп йоҡлаған, ҡулына эш тотмаған был малай. Донъя үҙенә ҡалғас, Ялбыр иркенләп йәшәй башлай. Көн дә ҡунаҡ йыя был, ҡурайсылар, йырсылар, бейеүселәр бының тирмәһенән өҙөлмәйҙәр. Дуҫ-иш Барыһы, ауыҙ һыуҙары ҡороп, Ялбырҙы маҡтайҙар. Эй ҡуҡырая Ялбыр, эй ҡуҡырая. Маҡтап һүҙ әйткәнгә бер – бер ат, көй сығарғанға – ике ат тоттора ла ебәрә был. Бара торғас, бары бер аты, бер һыйыры ғына ҡалған малайҙың. Ул Ә уйлап та бирмәй, һаман эшләмәй, ашай ҙа йоҡлай, ашай ҙа йоҡлай.

Атаһының дуҫы Малбай ҡарт, тәгәрмәстең ҡайҙа тәгәрәгәнен күреп табан, әйтеп ҡарай быға: «ҡустым Ялбыр, малыңды самалабыраҡ тот, ҡара уны, бөлөрһөң!..» Ул Ә: «Эй, тинтәк, һин нимә беләһең! Һайын Яҙ бейә ҡолонлай, һыйыр быҙаулап тора. Мал бөтһә, табылыр мал. Дуҫ-иш Малдан ҡыйбат. Күрәһең бит, минең дуҫтарым ҡайһылай күп!» – ти, көлә генә.Ауыҙы салыш булһа ла, бай балаһы һөйләһен тигәндәй, уныҡы – дөрөҫ, үҙе – баш, үҙе – түш бит. Тына СЃРµPSəPS Малбай. Ҡыланһын әйҙә, алйоттоң да үҙ аҡылы бар, ауыҙы бешкәс, өрөп эсер әле... Күп тә үтмәй, Ялбыр шыпа дә бөлгән ҡуйған, мал да юҡ, дуҫ-иштәр ҙә юҡ. Терһәкте ине тешләр лә, һуң инде шул, буй етмәй.

Аптырағас был, кәңәш өсөн һорар, йөҙ туҡһан йәшлек Тарауыл ҡартты саҡырта. Килә ҡарт. «Олатай Тарауыл,–ти Ялбыр уға,– әйт әле, донъяла бер ҙә бөтмәй торған ниндәй байлыҡ бар, мин шуны йыйыр инем». Ҡарт ни, оҙаҡ уйлап тормай, тота ла: «Донъяла бер ҙә бөтмәй торған байлыҡ – тир ул, – ти. – Тирҙең тамсыһы бер – бер алтын». Малай быға ышанмай: «Алдайһың, ҡарт Тарауыл!» – ти.

Ҡарт Тарауыл:

— Мин алдашырға малай түгел. Ерҙә йөҙ туҡһан йыл торамын, дөрөҫлөктән юлым борманым. Белеклегә бер һүҙ ҙә күп, белекһеҙгә ҙа суҡмар сүп! – тип ҡайта ла китә.

Шунан һуң аҙмылыр-күпмелер ваҡыт үтә, аҡтыҡ атын да һуйып ашай Ялбыр. Дуҫтар күптән ҡасып бөткәндәр, бер әмәл юҡ, асыға башлай был. Аслыҡ бик үҙегенә үткәс: «Туҡта әле, – ти Ялбыр, – бәлки, был алйот ҡарттың һүҙендә барҙыр дөрөҫлөк, тир йыйып ҡарайым әле...» ул Шунан, ҡат-ҡат тун кейеп, сәй эсергә ултыра. Шыбырҙап тир аға бының битенән, ул сәй һаман эсә, үҙе ә, таҫтамал менән тирен һөртөп алып, сынаяҡ аҫтына һығып ултыра. Бер самауыр сәй эсеп бөткәнсе, ике сынаяҡ тир һығып йыя Ялбыр. Бына ул тир бөртөктәренең алтынға әйләнеүҙәрен көтә башлай. Буйы Көн ҡарай, ятыр алдынан ҡарай тағы, юҡ, тир һаман, һыу кеүек, үҙгәрмәй тик тора ла тора. Аптырағас, малай, бармағын тиргә манып, тәмен татып ҡарай – әсе! «Их, алйот ҡарт, алдаған!» – ти ҙә сынаяҡты тире-ние менән сатнатҡансы ергә атып бәрә.

Аслыҡ атай түгел – башынан һыйпамай, ә туғыҙға бөгә Ялбырҙы. Ул, аптырағас бик, берәй төрлө тапмаммы аҙыҡ тип, урманға сығып китә. Йөрөй Эй, эй йөрөй был ҡыҙырынып, әммә бер нәмә лә тапмай. Хәлдән яҙып, бер ағасҡа һөйәлеп туҡталһа, ҡайҙалыр балта туҡылдаған тауыш ишетелә уға. Яҡында кеше барлығын белгәс, кереп китә йылы егеттең эсенә, шул тауыш килгән яҡҡа табан ыңғайлап атлай башлай. Барып етһә, ни күҙе күрһен менән, йөҙ туҡһан йәшлек ҡарт Тарауыл, тирләп-бешеп, урман ҡырҡып йөрөй. «Эй олатай, олатай,– ти Ялбыр уға,– алдағанһың мине, күпме тир йыйып ҡараным, бер тамсыһы ла алтынға әйләнмәне».

– Нишләттең һуң ул тирҙе? – тип һорай унан ҡарт.

– Сынаяғы менән атып бәрҙем, түктем!– ти Ялбыр.

– Их иҫәр, иҫәр!–ти ҡарт Тарауыл, көлөп.– Тирҙе гамсылап-тамсылап түгәләр уны, шунан ғына алтынға ул әйләнә. Мә, балтаны тот, ҡырҡып йыҡ ошо тирәкте.

Ялбыр, аҡтыҡ көсөн йыйып, тирәкте ҡырҡырға тотона. Маңлайынан бөрсөк-бөрсөк тирҙәре тама быныҡ. Тирен еңе менән һыпыра ла балтаһына тотона был. Торғас Тырыша, тирәкте ҡырҡып йыға ла ҡарт эргәһенә килеп ултыра егет. «Мә,– ти уға ҡарт Тарауыл, ҡуйынынан ҡатҡан икмәк киҫәге сығарып,– тамағыңды ялға». Ялбыр тирле ҡулы менән икмәкте ашап бөтә.

– Тәмле булдымы? – тип һорай ҡарт.

– Бик тәмле!

– Һуң Ә тир тәмлеме?

– Юҡ, әсе.

– Их иҫәр!– Тарауыл ти. – Икмәгеңә лә тир бит тейҙе, бер ҙә әсе булманы. Бына мин бөтә ғүмеремә шулай, һинең Янһары атайың һымаҡ, тир түгеп ашайым. шуға күрә икмәгем гел тәмле була минең. Алтын тамсы ана шул инде!

## Алп батыр

Борон-борон заманда Ағиҙел буйында бер бабай менән әбей йәшәгән, ти. Һунарға Бабай йөрөгән, әбей орсоҡ иләп, киндер һуҡҡан. Шулай бергә ғүмер иткәндәр, оло йәшкә еткәндәр. Әйләнеп ҡараһалар: үткән ғүмер, бер ҙә балалары булмаған. Үҙҙәре үлгәс, иҫкә төшөрөрлек кеше лә юҡ. Шунан бабай ҡайғырған бик да, уҡ-һаҙағын алып, балтаһын билгә тағып, сығып киткән. Киткән был Эй, эй киткән, бер тау битләсенә барып еткән. Шунда ял итергә ултырған. Торғас Ултыра, был йоҡомһорап киткән. Бабай шул бер ерҙә күргән төш. Төшөндә уға ошо тауҙың хужаһы килеп сыҡҡан.

– Эй, бабай, – тигән был, – ни эшләп бик бойоғоп киттең?

Ҡарт яуап биргән:

– Донъяла нисәмә йыл йәшәнем, бер улым да булманы. Үлеп китһәм, атым да, затым да юҡҡа сыға. Шуның өсөн ҡайғырам, – тигән.

Тау Теге хужаһы әйткән:

– Бер йән үлмәй, бер йән тыумай. Әгәр донъялыкта ул алһаң, үҙең донъянан китергә тейеш булаһың.

Ҡарт риза булған. Шунан теге хужаһы тау таш артына инеп юғалған. Бабай ултырып ҡалған уйға. Шунан һуң күп тә үтмәй, бабай башын һөйкәп ултырған таш ҡыймылдай башлаған. Бабай уянып киткән дә, билендәге балтаһын алып, ташҡа һуҡҡан. Таш киткән ярылып. Таш эсенән, тауҙы ярып, бик таҙа бер егет килеп сыҡҡан.

Бабай аптырап ҡалған. Егет, биреп йылмая, ҡарт янына килгән дә әйткән:

– Бына мин һиңә ул булып килдем, – тигән.

– Әйҙүк, улым,– ҡарт тигән, теге егетте ҡосаҡлап алған.– Мин һине ғүмерем буйы көткәйнем.

Егет бик килбәтле, үҙе бик мөһабәт, ҙур кәүҙәле икән. Бармаҡтары беләктәй, ти, уның. Беләктәре бүрәнәләй, аяҡтары кәмәләй, яландай яурыны киң, кәүҙәһе ныҡ имәндән, ти.

– Улым Мә, әләйһәң, минең ҡоралдарымды ал, – тип әйткән, ти, шунда бабай, малайына янында ятҡан уҡ-һаҙағын алып, билендәге балтаһын һалып биргән, ти.

Егет әйткән:

– Атай, был ҡоралдарың үҙеңдә торһон. Миңә икенсене – ҙурыраҡты яһап алайыҡ, – тигән.

Ҡарт әйткән:

– Юҡ, улым, был уҡ-һаҙаҡ менән балта миңә олатайыңдан ҡалған. Уларҙы мин һиңә тапшырам, – тигән. – Былар хәҙер һинеке булһын, ал мә, уғың менән ҡош ауларһың, менән балтаң урман ҡырҡырһың, – тигән.

Егет риза булып алған да ҡарттың һаҙағынан бер ук алып, йәйәһен киреп, керешен тарта башлаған. Әҙ генә тартайым тиһә, йәйәһе шартлап һынған да сыҡҡан. Йәйәһе шартлап тау һынған тауышҡа һелкенеп киткән, таш емерелеп төшкән, бабай ҙа йығылып киткән.

– Алп!.. – тип ниҙер әйтмәк булған да бабай, шунда йән биргән.

Егет тәүҙә аптырап киткән. Шунан ни, ни инде эшләһен, атаһын ҡәҙерләп кенә күмгән дә, балтаһын алып, ташҡа ҡайрап үткерләгән дә, сәс бәкеһе кеүек кенә усына итеп һалып, урманға инеп киткән. Унда бер йыуан оҙон имән ағасы ҡырҡып, үҙенә йәнә яһап алған. Өс айыуҙың кереш тарамышынан яһап тарттырған. Имән ҡырҡып, уҡ яһаған, ул уктың башағына ослo таш ҡуйған. Шунан донъя сығып гиҙергә киткән.

Сығып арьяғына Уралтауҙың, ете аҙым атлаған да туҡтаған. Тегенең аяғы төшкән урындар аҡлан-аҡлан тигеҙ ялан Єулып ҡалғандар. Егет шунда хәл йыйырға ултырған. Шул саҡ ҡаршы тауҙан быны бер ҡыҙ күреп ҡалған. Икән Ул хан ҡыҙы. Шунда ҙур ҡороп икән тирмә ята. Тирмәһенең ҙурлығы ике өйөр йылҡы һыйырлыҡ булған. Ҡыҙ үҙе лә мөһабәт батыр булған. Егетте күргән дә үҙенә саҡырып алған.

Ҡыҙ әйткән:

– Исемең нисек, егет? – тигән.

Егет аптырап ҡалған. Кешелә исем тигән нәмә булыуын ул белмәй икән.

– Нимә һуң ул исем? – тип һораған, Ҡыҙ йылмайып яуап биргән:

– Бына һиңә кем тип өндәшәләр һуң? - тигән. Егет әйткән:

– Атайым үлер алдынан ғына миңә «Алп» тип өндәшкәйне, – тигән.

Ҡыҙ әйткән:

– Улай булғас, һин Алп батыр булаһың инде, – тигән, – әгәр ҙә көрәштә мине алһаң еңә, мин һиңә ҡатынлыҡҡа барам, – тигән.

Егет, риза булып, тотҡан көрәш. Былар көн ете, ете төн көрәшкәндәр, шунан килеп, Алп батыр ҡыҙҙы еңгән. Алп батыр әйткән:

– Йә, һылыу ҡыҙ, вәғәҙәңде үтә, – тигән. Ҡыҙ әйткән:

– Минең күңелем күптән һиндә, – тигән. – Мин һинеке, һин минеке, көс һынаштыҡ – хәҙер бергә булайыҡ, – тигән.

Егет әйткән:

– Тәүҙә һин миңә исемеңде әйт, һылыу ҡыҙ, – тигән. Ҡыҙ яуап биргән:

– Минең Барһын исемем булыр, – тигән. Егет әйткән:

– Барһын һылыу, Барһын һылыу, йөрәгемде алһын һылыу, – тигән. Килеп ҡыҙҙы ҡосаҡлап алған.

Шунда былар ҡауышҡандар, туй үткәргәндәр, бергә тора башлағандар.

Уларҙың ете улы булған. Ошо улынан ете ете башҡорт ырыуы башланып киткән, ти. Ошо ете ырыу Урал буйын биләп йәшәгән. Алп батыр аяҡ баҫҡан ете аҡлан ошо ете ырыуҙың йәйләүе булып ҡалған, ти.

**Алдарҙың ер һатҡаны**

Берҙән-бер көндө Алдар хәбәр тараткан: «Шулай шулай ҙа, бер әсмухә сәйгә бер түтәрәм ер һатам». Алдарҙың был ниәтен ишеткәс тә, иң тәүҙә мулла килеп инә.

— Шулай шулай ҙа, кем мулла Алдар, һин миңә ереңде һатһаң, урының ожмахта булыр.

— Әйҙә, рәхим ит, ала күр. Тик хаҡына килеш кенә.

— Хаҡы күпме һуң әле? — һалышып белмәмешкә мулла була тигән.

— Бер әсмүхә сәй, мулла абзый.

Мулла тиҙ бирә лә генә сәйҙе ҡайтып китә. Шунан күп тә үтмәй мәзин килеп инә.

— Ереңде миңә һатһаң, сауаплы булырһың,— ти был,— ике донъялыҡта ла изгелек күрер инең.

— Әйҙә Ал, мәзин абзый, тик мин әйткән хаҡына ғына күн. Хаҡын алдан белгәс ни, бер әҫмүхә сәйен алып килгән мәзин.

— Күнәм, күнәм,— тип, бер әсмүхә сәйҙе ҡалдырып, мәзин сығып китә.

Күп тә үтмәй, ишек төбөндә тағы берәүҙең тамаҡ ҡырғаны ишетелә.

— Әйҙә, әйҙә,— тип ҡысҡырыуға, туҡ-туҡ таяғын таянып, мөтәүәлли килеп инә.

— Ереңде икән һатаһың, ишеткәйнем тип, хаҡ һүҙме!'

— Хаҡ, хаҡ.

— һин уны, ҡустым Алдар, минең кеүек изгелек юлында йөрөгән кешегә Һат. Ғүмергә күрерһең яҡшылыҡ.

— Ал, мөтәүәлли ағай, рәхим ит.

Мөтәүәлли ҙә бер әсмүхә сәйҙе ҡалдырып сығып Китә. Алдар самауыр ҡуя башлауға ғына бер бай килеп инә.

— Ереңде миңә һат, Алдар ҡусты,— ти быныһы ла,— мин һиңә хаҡты арттырып бирермен.

— Рәхим ит, бай ағай,— ти Алдар,— артығы кәрәкмәй. Алдар бынан да үҙе әйткән хаҡты алып ҡала. Сығып Бай китә.

Инде Алдар сәй эсергә ултырғанда генә, бер сауҙагәр инә килеп.

— Эй ҡустым Алдар, күҙ кешебеҙ күреш, әйтмәй-нитмәй ағайыңа, ереңде осларға йөрөй икәнһең. Миңә, һат, мин һиңә сәй янына ике шаҡмаҡ шәкәр ҙә өҫтәрмен,— ти сауҙагәр.

— Ал, сауҙагәр ағай,— ти Алдар,— үҙ хаҡына бирәм мин уны.

— Әһә, шулаймы?

Сауҙагәр һалырға торған шәкәрен тиҙ генә кеҫәһенә тығып, сәйен генә ҡалдырып сығып китә. Алдар бер сынаяҡ сәйен эсеп бөтөүгә йорт старшинаһы килеп инә.— һин, Алдар ҡусты, ереңде ситкә һатырға тейеш түгелһен,,— ти был.— Миңә һат, эйе, мин бит, үҙең беләһең, закон кешеһе.

— Ала күр,— ти Алдар,— тик хаҡына күнһәң, тим инде.

— Хаҡы беҙҙең өсөн бүстәк,— тип старшина ла бер әсмүхә сәйҙе өҫтәлгә сығарып һала. Шунан үҙ юлына китә. Алдар эсеп сәйен бөтөп, инде тигәндә генә торам, ишектән мирауай судья инде килеп, ти.

— Алдар Фәләнович, һеҙ ерегеҙҙе һатаһығыҙ икән. Мин уны үҙем булдым алырға,— ти был.

— Рәхим ит, господин судья, ер бик яҡшы. Во, тигән! Судья ла артыҡ туҡталып тормай бер әсмүхә сәйҙе кеҫәһенән

сығарып Алдарға тоттора ла үҙ юлына китә.

Иртәгәһен иртүк тегеләр, береһе ҡалмай лә, хеҙмәтселәрен алып, Алдар күрһәткән ерҙе һөрөргә килгәндәр, ти. Килһәләр, бер генә түтәрәм ерҙә ете хужа булып киткәндәр, ти. Ни эшләргә?

— Алдар был ерҙе миңә һатты,— әйтә тип, ти, береһе.

— Юҡ, һиңә түгел, миңә һатты,— әйтә тип, ти, ҡалғандары.

Шулай итеп был ете хужа араһында тауыш сыҡты, ти. Тамаҡтары ҡарлыҡҡансы талашҡандың һуңында, яғалашыуға етә яҙған саҡта ғына, мирауай судья:

— Йәмәғәт, улай боҙмағыҙ законды. Сабыр итегеҙ. Киттек Алдарҙың үҙенә! — тип ҡысҡырып, уларҙы аңдарына килтерә. Китәләр Алдарҙың үҙенә. Шау-гөр килеп инәләр былар, Алдарҙы өҙгәләп ташларҙай булып. Ҡысҡыра Мулла:

— Һин, ахмаҡ, нишләп улай бер түтәрәм ереңде ете кешегә һатаһың?

Алдар иҫе китмәй генә яуап бирә:

— Бәй, мулла абзый, ер ете ҡат, тип әйткән кеше һин түгелме ни әле ул?

— Мин.

— Һуң?

— Мин булһа ни! Ер ете ҡат инде ул. Китап шулай ти. Уны бына ил ағалары ла белә.

— Ете ҡат, мулла, ете ҡат! һәр кемсәнгә мәғлүм инде ул ерҙең ете ҡат икәне,— тиешәләр тегеләре.

— Бәй, шулай булғас, һеҙҙең ғауға күтәреүегеҙҙе аңлап етмәйем. Мин етәүегеҙгә ерҙең ете ҡатын һатҡанмын, һатыу минән, үҙегеҙҙән бүлешеү. Йәрәбә һалаһығыҙмы, нишләйһегеҙ, уныһын үҙегеҙ ҡарағыҙ,— тип, үҙ эшенә тотондо, ти.

Ни инде Тегеләр эшләһен? Елкәләрен тырнай-тырнай сығып киткәндәр, ти.

## Аҡыллы бесәй менән таҙ

Борон заманда булған, ти, бер таҙ. Ул көлгә борсаҡ һипкән дә гел шуны ашаған. Өҫтөндә күлдәге лә, ыштаны ла, лә башында түбәтәйе булмаған бының. Көндәрҙең бер көнөндә таҙ янына бер бесәй килеп ингән, ти.

– Таҙ шайтан, ни эшләп ултыраһың, кәләш тә алмайынса?– икән ти бесәй.

– Алыр инем, өҫтә күлдәк-ыштан юҡ, башта түбәтәй юҡ,– ти икән таҙ.

– Кәләш алам, әйт тип, мин һиңә күлдәк тә, ыштан да, түбәтәй ҙә табам,– тигән бесәй.– Хәҙер башҡоҙаға үк барам,– ти ҙә бесәй сығып китә. Ул батшаға барып керә.

– Ни хәл, падишам? – ти бесәй. – һинең бар ҡыҙың, минең улым бар. Икәү ҡоҙа булышайыҡ. Улым ученай-печенай купис. Бында яланда йөрөгән көтөүҙәр барыһы да уныҡы,– ти.

– Туҡта әле, бесәй, ҡарсыҡ менән кәңәшләшәйек,– ти батша. Батша ҡарсығы менән кәңәшләшеп ала. Шунаи бесәй батшанан:

– Мәһәре күпме тора?– тип һорай.

– Ун төлкө, айыу ун, ун бүре, ун ҡуян. Шуларҙы түлап бөтһәң, киләһе йомаға килерһегеҙ,– ти батша.

Бесәй ҡайтырға сыға. Юлда быға биш төлкө осрай.

– Һеҙ әле бишәү гейә, унау булын батшаға барығыҙ. Батша ҡыҙын бирә, аш-һыу шәп, ман дә шунда булдым, һеҙ ҙә барып һыйланығыҙ,– ти бесәй тегеләргә.

Төлкөләр унау булып алалар ҙа батша һарайына баралар. Батша уларҙы ҡуя яптырып.

Бара торғас, бесәйҙең ҡаршыһына биш бүре килеп сыға, – Эй, бесәй дуҫ, ҡайҙа барҙың? – тип һорайҙар бүреләр.

– Батша ҡыҙын биргән. Та Аш һыу. һеҙ барығыҙ ҙә. Тик унау булып китегеҙ,– ти бесәй. Бүреләр унау булып алалар ҙа батша һарайына китәләр. Быларҙы ла һәйбәтләп батша ҡуя ябып.

Бер аҙ барғас, бесәй биш айыуға осрай.

– Ҡайҙа бараһың, бесәй дуҫ?– тиҙәр айыуҙар.

– Батша ҡыҙын биргән. Та Аш һыу. һеҙ барығыҙ ҙа. Унау барығыҙ Тик булып,– ти ҙә ары китә бесәй.

Айыуҙарҙың, унау булып, батша һарайына етеүҙәре барып була, батшаның хеҙмәтселәре быларҙы шартлатып бикләп тә ҡуялар.

Бара-бара бесәй, бара торғас, биш ҡуян күрә,

– Эй, бесәй дуҫ, ҡайҙан киләһең? – тип өндәшәләр былары ла.

– Һарайынан Батша. Батша ҡыҙын биргән. Та Аш һыу. Шунда булдым, һеҙ ҙә барып һыйланығыҙ. Унау барығыҙ Тик булып,– ти бесәй.

Ҡуяндар, унау булып, батша һарайына китәләр. Быларҙы ла ҡуялар ябып.

Шулай итеп, мәһәр түләнеп бөтә. Бесәй ҡайта ла таҙға:

– Әйҙә, таҙ, киттек, мәһәр түләнеп бетте,– ти.

– Күлдәк-ыштан юҡ. Нисек барайым? – ти таҙ.

– Әйҙә, шаулай күрмә, барыһы ла булыр,–ти бесәй. Бесәй таҙҙы тышҡа алып сыға ла унын тәненә япраҡ, сәскәләр йәбештереп бөтә. Шунан алып лә китә, таҙҙы һыуға батырып, батшаға хәбәр ебәрә: «Беҙ һыуға баттыҡ, ағып кейемдәр беттә. Йәһәт кенә килеп етегеҙ!»

Шул арала бына тигән уйнап торған аттар егеп, батшаның кешеләре килеп тә етәләр. Таҙҙы һыуҙан сығарып, аҫыл кейемдәр кейендереп, бесәй менән икәүһен алып та китәләр.

Шул кисте үк кейәүҙе ҡыҙ менән бер бүлмәгә ябып ҡуялар. Бер бер кейенә лә сисенә икән таҙ төнө буйына, бер ҙә ҡыҙға ҡарамай икән. Шулай төндө үткәрә был.

Иртәгеһен иртүк ҡыҙ килә лә еңгәләренә әйтә:

– Кейем күрмәгән кешегә бирҙегеҙ ҙә, төндө кейенеп бер, бер сисенеп уҙғарҙы,– ти. Еңгәләре был хәбәрҙе ҡыҙҙың әсәһенә, һеәсәһе батшаға еткерә. Батша бесәйҙе саҡырып ала ла:

– Кейем күрмәгән кешегә ҡыҙымды димләп, беҙҙең биттән көлдөң,– ти.

– Кейемдәре һеҙҙеке Унын ише түгел генә ине, «Хеҙмәтсе киймәгән кейемде мин кейҙем» тип, ғәрлегенән шулай ҡылан-ғандыр ул,– ти бесәй.

Шунан бесәй таҙҙың сыҡҡанын ҡарап тороп:

– Ниңә биттән көләһең?– тип уңға ла, ла һулға сабып ебәрә икән тегене. Булғас Кис:

– Бөгөн төнө буйы ҡыҙ менән бул,– тип өйрәтеп, ҡыҙ бүлмәһенә индереп ебәрә таҙҙы.

– Таҙ бесәй өйрәткәнсә эшләй. Ҡыҙҙың күңеле була. Ҡуналар Дүртте былар, таҙҙы хөрмәт итәләр. Алтынсы көндө бесәй:

– Мин алдан ҡайта торайым,– тип юлға сыға. Килә торғас ул йылҡы көтөүен күрә. Көтөүселәр бара эргәһенә ла:

– «Кем көтөүе?» – тип һораһалар: – «Ученай-печенай купис көтөүе»,– тип әйтегеҙ. Арттан туй килә,– тип ары китә-Килә торгас, бесәй ҡуй көтөүенә осрай.

– «Кем көтөүе?» – тнп һораһалар: – «Ученай-печенай купис көтөүе»,– тнп әйтегеҙ. Арттан туй килә,– ти бесәй көтөүсегә. Бер аҙыраҡ барғас, бесәй һыйыр көтөүен күрә.

– «Кем көтөүе?» – тип һораһалар: – «Ученай-печенай купис көтөүе»,– тип әйтегеҙ. Арттан туй килә,– ти бесәй был көтөүсегә лә.

Бесәй ҡайтып етә лә бер бай ҡарт менән ҡарсыҡ янына бара.

– Әйҙәгеҙ, йәһәтерәк һалам аҫтына инеп йәшеренегеҙ, яу килә, хәҙер үләһегеҙ, харап булаһығыҙ,– ти.– Керегеҙ Эскәрәк, эскәрәк, – тип, бай менән әбейен һалам эҫкерте аҫтына индерә лә ел башынан эҫкерткә ут төртә бесәй. Бай менән ҡарсығы янып үләләр.

Кисләтеп кенә туй етә килеп. Бесәй югереп сығып ҡапҡа аса. Туй артынан кәртәгә бер нисә өйер көтөү ҡайтып керә. Теге юлдағы көтөүҙәр әлеге байҙыҡы булған икән. Батша: «Бесәй икән алдамаған, ҡыҙым бай кейәүгә барҙы», – тип бик шатлана, ти. Туй Гөрләтеп яһайҙар.

Бал эсеп, аш ашап, мин дә шунда йөрөгәнмен. Бөгөн ҡайттым әле генә.

## Серле йөҙөк

Элек бер ҡарт менән әбей йәшәгән, уларҙың бер улы булған. Теге ҡарт көн дә бәләкәй сана менән юкә алып ҡайта. Сабата үрергә тотоналар. Ҡайырын һыҙыралар, сығарып ташлау юҡ. Үрәләр, үрәләр ҙә юкә өҫтөнә ятып йоҡлайҙар. Ҡайыр тәҙрәнең тупһаһына еткән, ти.

Сабатаны бабай баҙарға илтеп һата. Бер көндө бабай бахыр үлеп китә. Ҡарттың дүрт һум аҡсаһы ҡалған, байлығы икән бөтә шул.

Бер ваҡыт быларҙың ашарына бөттө, ти. Әбей улына тәңкә бер биреп аҡса:

– Баҙарға барып, он алып ҡайт, – ти.

Улы китә. Сәнәскәһен һөйрәп йөрөй, йөрөй, бер ҙә он баҙарына барып әйләнмәй ти, үҙе. Тегеләй ҙә үтә, былай ҙа үтә, тик йөрөй. Баҙар тарала башлай. Шул бер саҡ ҡарт эт етәкләп килә икән. Эт тигәс тә, бәләкәй генә көсөк, ти.

– Бабай, ҡайҙа алып бараһың был көсөктө? – тип һорай егет.

– Һатам, – ти бабай.

– Күпме тора?

– Әллә, күпме тип ни, янында күпме аҡсаң бар, бир ҙә ал! Егет, кеҫәһендәге бер тәңкәһен биреп, көсөктө алып ҡайтҡан. Ҡайтҡас, әсәһенә:

– Бына бер тәңкәгә алдым эт, – тигән.

– Һәләк икән иткәнһең, атайыңдан ҡалғас, асҡа үлермен инде! – тип зарланған әсәһе.

Икенсе етә баҙар. Әсәһе йәнә тәңкә бер биреп аҡса, улын ебәрә баҙарға. Улы он баҙарына барып та әйләнмәй, йөрөй ҙә йөрөй, йөрөй ҙә йөрөй. Бер ҡарт бесәй тотоп йөрөй икән шунда.

– Бесәйҙе ҡайҙа алып бараһың, бабай?

– Һатам.

– Күпме тора?

– Әллә, янында күпме аҡсаң бар, бир ҙә ал.

Егет, бер тәңкәһен биреп, бесәйҙе алды ла ҡайтты, ти. Әсәһе бахыр тағы илай. Тегеләй-былай, бейәләй бәйләп, ойоҡ бәйләп, тамаҡланалар былар.

Йәнә бер аҙна үтә. Әсәһе йәнә баҙарға ебәрҙе, ти, улын, бер тәңкә аҡса тоттороп.

– Улым, инде бер нәмәгә лә ҡарама, туп-тура он баҙарына бар ҙа он ал да ҡайт! – тигән.

Киткән улы. Элекке кәүек, йөрөй ҙә йөрөй, йөрөй ҙә йөрөй, ти, баҙарҙа. Берәү тотоп икән мылтыҡ тора. Мылтығы ярылып бөткән, ти.

– Бабай, һатаһыңмы?

– һатам кешегә алған.

– Күпме тора?

– Мин һорамайым хаҡын. Янында күпме аҡсаң бар, бир ҙә ал.Егет, бер тәңкәһен биреп, алып мылтыҡты ҡайтты, ти. Әсәһе он көтөп тора. Юҡ Ашарға. Әсәһе, ярыҡ күрҙе мылтыҡты лә, илай башланы, ти. Эй илай, илай эй, ти.

– Ҡуй, әсәй, илама. Һунарға иртәгә Мин китәм, – ти улы. Мылтығын арлы-бирле ҡаҙаҡлап, сығып ҡуянға иртәгеһен

китте, ти, был. Йөрөй торғас, бер ҡуянды атып алды, ти. Ергә Аяғы теймәй ҡайтты, ти, был.

– Бына, әсәй, беҙгә дүрт көнгә етә был ҡуяп, ти.

Һөйөнөп киткән булды, ти, әсәһе. Бешереп ашанылар, ти. Иртәгеһен йәнә сығып китә улы һунарға саңғы менән. Атты ҡуянды Бер, ти, һынып бото, китте, ти, теге. Юллап Ҡуянды китә был. Юллап бара торғас, күреп ҡала: бер һыңар саңғылы кеше бының ҡуянын юллап ҡыуып бара. Бәй! Был ғибрәт ниндәй! Баҫтырып бара торғас, һыңар саңғылы теге ҡуянды тота, ти.

– Ниңә минең алдың ҡуянды? Бир!

– Үҙем баҫтырып алдым.

– Юҡ! Ҡуян минеке, бир!

– Ҡуй, талашмайыҡ, әйҙә бергә барып бешереп ашайыҡ. Китәләр былар. Бер тауға барып инеп китте, ти, был һыңар саңғылы. Инмәҫ борон егеткә әйтте, ти:

– Минең бик матур бар ҡәрендәштәрем, алдыңа килеп торорҙар, теймә уларға.

Инеп ултыралар, йылмылдашып йөрөйҙәр ҡыҙҙар ҡына. Бер ҡыҙ килеп, терәлеп кенә ултыра. Был егет төрткән дә ҡуйған тегенең бөйөрөнә. Төртөүе булды, ҡыҙ егетте быуҙы ла ташланы, ти.

– Әҙәм ҡағылды ла әҙәм ҡағылды, – тип ҡысҡыра икән үҙе.

Шунан яйланы араны, ти, теге һыңар саңғы менән йөрөгән егет. Һин дә мин һөйләшеп тик йөрөйҙәр хәҙер. Бер көн ята был, ике көн ята ашап-эсеп, өсөнсө көндө:

– Мин инде ҡайтайым, әсәйем дә мине юғалтып торор,– ти.

– Ярар, – тигән саңғылының һыңар атаһы, – бына һиңә көсөң еткәнсе бирәм аҡса, алып ҡайт, күпме күтәрһәң дә күтәр.

Теге алып ҡайтҡан егет:

– Һин аҡсаһын алма уның, бер йөҙөгө бар, йөҙөгөн һора.– икән ти шыбырҙап ҡына.

Егет бабайға:

– Юҡ, аҡсаң кәрәкмәй миңә, ҡулындағы йөҙөктө бир. Ҡайтам Шунан, – ти.

– Юҡ, һиңә эләкмәй ул йөҙөк, ҡайҙа ул!

– Бирмәһәң, ҡайтмайым.

Аптырағас, биргән йөҙөктө. Теге егет быны оҙатып килгән.

– Кәрәк ааҡытта ошо йөҙөк аша әсе итеп һыҙғырт шунан һинең ҡаршыңа ен-шайтан баҫыр килеп. Нимә Ә һин кәрәк , булһа, һораһың шуны. – тигән.

Егет бер аҙ киткәс тә йөҙөктө һыҙғыртып ебәрҙе, ти. Дүрт шайтан килеп тә баҫҡан ҡаршыһына.

– Ни хәжәтең бар? – тиҙәр.

– Хәжәтем шул инде, бына әсәйемдең дә бер кейеме юҡ, үҙемдең дә кейемем юҡ. Кейем кәрәк ине, – ти егет.

– Ярар, әҙерәк кенә сабыр ит. Ятып тор, йоҡла, – тиҙәр уға.

Теге йоҡлай бер ағас төбөндә. Уянып китһә, ботаҡ тулы кейем килтереп элеп ҡуйғандар, ти. Көсө еткәнсе киткән күтәреп егет.

Ҡайтҡан был йөкмәнеп.

– Уй-й! Ҡайҙа йөрәнәң? Булдыңмы Юлбаҫар? Кемде таланың? – тип икән әрләй әбей улын.

– Юҡ, юҡ, әсәй, берәүҙе лә таламаным. Күктән көткән ерҙән килде инде, – ти улы.

Йоҡларға яталар. Тән уртаһы икән еткән, улы сығып тышҡа, йөҙөгө аша һыҙгыра. Әлеге ендәр килеп төшәләр.

– Ни кәрәк?

– Ашарға бер нәмәбеҙ ҙә юҡ. Он да юҡ, ит тә юҡ беҙҙең. Шулар кәрәк.

– Ярар, ярар, ятып тор.

Ята. Уянып китһә, бының үтә-һүтә күренеп торган алама ғына аласығы туп-тулы ашамлыҡ та эсемлек, ти. Ул тоҡ-тоҡ ондар, ул ите тулып ята, күгәрсен һөтө генә юҡ, ти. Әсәһе:

– Был ғибрәт ниндәй? Ай-һай, улым, ҡулың таҙамы икән!– ти.

– Таҙа, әсәй, таҙа, күрмә шикләнә, – ти улы.

Икмәк бешереп ташланы, ит бешерҙе, ти, әсәһе. Бына тотондолар, ти, ашарға. Көсәк тә тук, бесәй ҙә мырылдап йәбешкән, ти.

Ашап, туйып, йоҡларға яталар былар. Төндә егет, сығып тышҡа, балдағын һыҙғыртып ебәрҙе, ти, әлеге ендәр килеп төштө, ти.

– Ни кәрәк?

– Бына кирбестән йорт һалырға ине. Ике ҡатлы булһын. Һәйбәт булһын.

Иртәнсәк торһалар, әсәһе менән улы яңы өйҙә яталар. Эт тә шунда, бесәй ҙә шунда, ти. Ҡото осоп уянды, ти, әбей.

– Уй-й! Ни булды беҙгә, ни булды?

– Булмаған, бына шундай йорт һалдыҡ.

Хәҙер өйгә карауаттар кәрәк, тәҙрәләргә пәрҙәләр кәрәк. Уйлап ултыра егет, тағы нимәләр кәрәк икәнен уйлап бөтә. Була Кис, йәнә ебәрә һыҙгырын. Уйлағаны алдына килгән: карауаты ла бар, пәрҙәләр ҙә ҡоролоп бөткән.

– Бынаһы ла булды! Фәлән батша ҡыҙын алайым булмаһа, – ти егет.

Саҡырып Ендәрҙе, егет:

– Бына ошонан фәлән батшаға хәтле тимерҙән күпер булһын,–ти

Тороуға һалынған Иртән күпер. Егет, сукеш алып, тимерҙәргә шаҡ та шоҡ һуғып йөрөгән була, ти. Йәнәһе үҙе һалған. Шунан егет батшаға яусы ебәргән.

– Бирермен Биреүен, шундай егет булгас. Тик туйға килерһегеҙ, фәлән ваҡытта, бер төҫ аттар менән, бер төр күсерҙәр менән. Пар Утыҙ.

Төндә егет ендәргә бойороҡ биргән. Иртәгеһен уянып китһәләр, утыҙ пар бер төҫ ат егелгән, бер төҫлө кейенгән күсерҙәр дилбегәләрҙе тотоп ҡына ултыралар, ти. Туйға китәләр.

Батша һарайында шаулатып туй үткәрәләр. Хәҙер кейәү саҡыра ҡунаҡҡа.

– Ҡайтырға пар утыҙ бер төҫ ат булһын, – ти ул. Батша тегенән дә эҙләп ҡарай, бынан да эҙләп ҡарай, юҡ, таба алмай.

Була Кис, егет ебәрә һыҙғыртып. Әлеге аттар килеп тә торҙо, ти. Киттеләр Шуларға ултырып ҡайтып, ти, кейәү менән ҡыҙ. Донья башлайҙар көтә. Килен һиҙенә ниҙер. Батша уны ҡоторта икән Ә. Хәйерсе малайы ул, һиңә иш түгел, ти. Тылсымлы нәмәһен ҡулыңа төшөр ҙә үҙен ташлап кит, ти. Ҡыҙы ирен башлай аңдый. Аңдып йөрөй торгас, йөҙөктө эләктерҙе, ти. Һыҙғыртып ебәргән, әлеге ендәр килеп тә төшкән.

– Ни эшләргә?

– Был һарайҙы атайымдың йортона ҡапма-ҡаршы илтеп ултыртығыҙ!

Ендәр йортто күтәреп алып барғандар ҙа ултыртҡандар. Уянып китһәләр, егет, әбей, бесәй, эт әлеге алама өйҙәрендә яталар, ти. Егет ырғып тора. Ни эшләргә хәҙер. Шул арала батша егетте ҡулға алып та китә. Күсерелгән йорттоң зиндан икән иткән аҫтын. Быны шунда яптылар, ти. Ни эшләргә хәҙер? Ҡотолоу юлын аҡыл табырльгк юҡ, йөҙөк тә юҡ! Бесәй эт менән үҙ-ара һөйләшәләр:

– Әйҙә эҙләп китәйек. Табырбыҙ, моғайын.

Киттеләр, ти, былар, бахырҙар. Баралар Эй, эй баралар, бер киттеләр дәү диңгеҙҙән сығып дә, ти. Эт йөҙә, бесәй эт өҫтөндә ултырып бара. Барып таптылар, ти, батшаның торған ерен. Яйын тура килтереп, бесәй төрмәгә, хужаһы янына үтеп инде, ти. Бесәй менән егет илашып алдылар, ти. Бесәй йөҙөктө табырға һүҙ бирҙе, ти.

Бына бесәй, өйҙө тирәләтеп, иплэп кенә урап йөрөй. Өйгә нисек инергә? Эт йәшенеп ята, ти. Ишек асылған ыңғайға бесәй аяҡ араһынан һиҙҙермәйенсә генә өйгә үтте, ти. Хәҙер йөҙөктө ҡалай алырға итеп? Эҙләй, эҙләй йөҙөктө, ҡайҙа икәнен дә белә алмай, һағалап ултыра торгас, килендең ауыҙына ҡапҡанын белеп ҡала. Бер сыскан тотҡан да бесәй тегенең ҡойроғон иплэп кенә өҙөп алған. Ҡыҙ йоҡлап киткән икән танауына гына йыбырҙаткайны, теге сөскөрөп ебәрҙе, йөҙөк төштө лә китте, ти. Бесәй элеп тә алды, ти, тегене. Батша ҡыҙы, сәсәп-сәсәп, тышҡа сығып киткәйне, бесәй ҙә артынан ҡалманы уның, тн. Эткә барып һәйәнсө был алған.

– Әйҙә, киттек зинданға!

Егеткә барыу өсөн бер ҙур һыу аша сығырға кәрәк икән. Әйтә Эт:

– Йөҙөктө миңә бир! Бирмәһәң, мин һине алып сыҡмайым, теләһә нисек сыҡ! – ти.

– Ҡуй, юғалтырһың, – ти бесәй.

– Юҡ, төшөрмәйем, бир, бирмәһәң, сығармайым.

– Ярай, улай булгас, мә, төшөрмә!

Эт йөҙөктө ауыҙына ҡанҡан, бесәй атланған эткә, йөҙөп баралар былар! һыуҙы сығыр алдынан гына, бер дәү балыҡ эттең эйәге аҫтынан ғына үтеп бара икән. Түҙмәгән Эт. Тип Һам тешләгән ыңғайға, йөҙөк һыуға төш тә кит. Теге балыҡ йәҙәктө эләктереп тә алған. Ярға сығалар былар.

– Ҡайҙа йоҙок?

– Төштө ул, балыҡты тотайым тигәнсе төштө.

Бесәй һуғыш та кит менән Эт. Ҡанға туҙыштылар. Арып, хәлдән тайып, яттылар, ти, былар.

Саҡ Шул бер егет килә икән, ҡармаҡ күтәргән. Эт тегенең эргәһенә ялпылдап бара ла бер ҙә эргәһенән китмәй.

Егет һала ҡармаҡ, һала, балыҡ бер ҙә ҡапмай.

Һиңә атап һалып ҡарайым әле, тип икән һалған, әлеге дәү балыҡ килеп тә эләккән.

– Бына бәхетең икән бар әле! – тип, егет балыҡты эткә ырғытҡан. Эт эсен ярып ебәрһә, әлеге йөҙөк килеп тә сыҡҡан. Балыҡ ҡайғыһы ла юҡ, эт сапҡан бесәйгә:

– Йөҙөктө таптым! Быны, балыҡ эсенән килеп сыҡты. Киттеләр сығып Уйнаҡлатып, ти, былар, белмәйҙәр ни эшләргә, ти. Зинданға баралар, бесәй элеккесә инеп китә. Егеткә йөҙөктө бирә.

Булган Кис. Егет йөҙөктө һыҙғыртып ебәргән. Теге ендәр килеп тә төшкәндәр.

– Ни эшләйбеҙ?

– Һарайҙы кире илтеп ултыртығыҙ.

Егет тә, эт тә, бесәй ҙә аҫтындағы ултырып зинданда барғандар һарай, ти. Батша ҡыҙын да алып киткәндәр.

– Килеп ҡаптыңмы? Һырт ҡайышыңды һыҙырам, – ти икән егет.

Батшаны ла елтерәтеп килтертәләр.

– Ҡыҙыңды ҡотортоп, минең башты һәләк итергә йыйынғайның, хәҙер мин башыңа етәм, – тигән.

Егет ярылып бөткән мылтығы менән батшаны шунда уҡ үлтергән. Ҡатынын, ғәфү итеп, бер юлға ҡалдырған, ти.